**Художестволы-эстетик үсеш буйынса мәктәпкә әҙерлек төркөмөндә «Күңелле ҡәләмдәр» темаһына ойошторолған белем биреү эшмәкәрлеге**

Программа йөкмәткеһе: балаларҙы үҙ аллы материалды һайлап алып һүрәт төшөрөргә өйрәтеү; уларҙың ижади һәләттәрен үҫтереү; байрам кәйефе тыуҙырыу.

Йыһазландырыу: флагтар, аҡбурҙар, ҡәләмдәр, фломастерҙар, ҡағыҙҙар, таҡта, гуашь, салфеткалар, палитралар.

**Дәрес барышы**

1. **Ойоштороу моменты.**

Тәрбиәсе. Балалар, мин һеҙгә йомаҡ әйтәм, ә һеҙ яуабын табығыҙ.

Ҡулланған һайын
Ҡыҫҡара бара,
Ҡыҫҡарған һайын
Оҫтара бара. (Ҡәләм)

*Күңелле көй уйнай, Рәссам килеп инә.*

Рәссам. Һаумыһығыҙ, балалар. Мин Рәссам булам. Һүрәттәр төшөрөргә яратам. Һеҙҙең балалар баҡсаһында бигерәк матур икән. Һеҙ бында нимәләр эшләйһегеҙ? (Балаларҙың яуаптары: әкиәт тыңлайбыҙ, бейейбеҙ, һүрәт төшөрәбеҙ...)

Тәрбиәсе. Эйе, беҙҙең балалар күп нәмәгә өйрәнгәндәр. Улар уйындар ҙа уйнарға яраталар. Әйҙәгеҙ түңәрәк уйыны уйнап күрһәтәйек: “Бир ҡулыңды, Камила” (балалар уйнайҙар).

Рәссам. Ҡайһылай күңелле уйын, балалар, мин дә уйындар уйнарға яратам, әйҙәгеҙ, минең менән уйнарға.

Тәрбиәсе. Балалар, уйнайбыҙмы?

**2. Төп өлөш.**

“Күңелле буяуҙар” уйыны.

Рәссам балаларға төрлө төҫтәге флагтар тарата. Балалар түңәрәк буйлап йүгерәләр, ә Рәссам уртала тора. Көй туҡтаһа, Рәссам берәй төҫтәге флагты өҫкә күтәрә. Кемдең төҫө тап килә, шулар Рәссам янына йүгерә.

“Йәйге һүҙҙәр” уйыны.

Рәссам һүҙҙәр әйтә. Әгәр улар йәнле булһалар (күбәләк, сиңерткә, терпе һ.б.), балалар ҡулдарын өҫкә күтәрәләр. Әгәр йәнһеҙ предметтарҙы әйтһә (арбуз, ямғыр, ҡояш һ.б.), ҡулдарын артҡа йәшерәләр.

Рәссам. Миңә һеҙҙең менән уйнауы бик оҡшаны, ә шулайҙа мин күберәк һүрәт төшөрөргә яратам. Ә һеҙ, балалар, һүрәт төшөрөргә яратаһығыҙмы? (балаларҙың яуаптары).
Рәссам. Мин бигерәк тә йәй миҙгелен яратам, ә һеҙ? (балаларҙың яуаптары)
Тәрбиәсе. Балалар, әйҙәгеҙ йәй миҙгеленә арналған һүрәттәр төшөрәйек, һеҙ ризамы?
Өҫтәлдәрҙә балалар һайлап алырлыҡ итеп төрлө материалдар һалынған. Балалар фломастер, гуашь, ҡәләмдәр менән ҡағыҙ битендә һүрәт төшөрә алалар.
Һүрәттәрҙе эшләп бөткәс, таҡтаға урынлаштыралар. Бергәләп бөтә эштәрҙе ҡарап сығалар.

**3. Йомғаҡлау.**

Рәссам. Һеҙ бигерәк матур итеп һүрәттәр эшләнегеҙ, оҫта икәнһегеҙ. Был балалар баҡсаһында бигерәк һәләтле балалар күп икән, һүрәттәр төшөрөргә яратаһығыҙ икән. Балалар, һеҙ мине ҡыуандырҙығыҙ, мин һеҙгә бүләккә уйындар алып килдем, бергәләп уйнарһығыҙ.
Тәрбиәсе. Рәхмәт һиңә, Рәссам. Беҙ бик шатбыҙ.
Рәссам. Һеҙгә уңыштар теләйем, ләкин миңә икенсе балалар баҡсаһына барыр кәрәк. Һау булығыҙ.
Тәрбиәсе. Һау булығыҙ. Балалар, әйҙәгеҙ күңелле көйгә бейеп алайыҡ.